# Ата-әсәләр өсөн кәңәштәр.



Баланың телмәрен үҫтереү өсөн “Төлкө менән айыу”, “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?” , “Айыу менән бал ҡорттары” тигән башҡорт халыҡ әкиәттәрен, “Шалҡан”, “Тирмәкәй”, “Ҡыҙыл башлыҡ” рус халыҡ әкиәттәрен уҡырға, аҙаҡ уларҙың эстәлеген һөйләргә, йә уларҙың йөкмәткеһе буйынса әңгәмәләшергә кәрәк. Был саҡта баланың әкиәт геройҙарына ҡарата булған үҙ мөнәсәбәттәрен белергә һәм уларҙы бергәләп баһалау мөмкинселеге тыуа. Әкиәттәрҙән ҡыҫҡа ғына өҙөктәрҙе ролдәргә бүлеп, бергәләп уйнарға була. Әкиәттәр баланың фекерләүен, хәтерен, бәйләнешле телмәрен үҫтерә, кешклек сифаттары тәрбиәләүгә ярҙам итә.

Һөйләү телмәрен үҫтереүгә йомаҡтар, мәҙәктәр, шиғырҙар, һанамыштар ҙа булышлыҡ итә. Мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе ятлағанда мотлаҡ уларҙың мәғәнәһе аңлатылырға һәм артабан телмәрҙә дөрөҫ ҡулланылыуы күҙәтелергә тейеш.

Балалар менән ятлар өсөн шиғырҙарҙы һеҙ үҙегеҙ һайлап ала алаһығыҙ. Матур, асыҡ, аңлайышлы итеп һөйләүгә иғтибар биреү кәрәк. Тәүҙә үҙегеҙ, тауышты ҡайҙа күтәрергә, ҡайҙа түбәнәйтергә, ҡайҙа туҡтарға икәнлеген күрһәтеп, балаға уҡып сығығыҙ. Әгәр ятлап күрһәтһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы.







Бала телдең грамматик төҙөлөшөн төшөнә башлай, ләкин хаталар осрап ҡуя. Килеш ялғауҙарын, ярҙамсы һүҙҙәрҙе дөрөҫ билдәләү, махсус һорауҙар ҡуйыу, яуапҡа тейешле ялғау йәки ярҙамсы һүҙҙе тура килтереп һайлау ярҙамында күнектерергә була. Балаларҙы аңлайышлы итеп һөйләргә, уларҙың һүҙ байлығын үҫтереүгә, китап ҡарарға, уҡырға ынтылыш тәрбиәләү ата – әсәләрҙең алдында торған ифрат ҙур бурыстар.